# ҒИНУАР

## Күҙәтеү № 1

**Ҡар яуыуын күҙәтеү.**

**Маҡсат** - тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе күрерг, һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү.

**Эш барышы** - ҡыш тураһында шиғыр уҡыу.

Аҡҡа сорнап бар доньяны
Тәүге ҡар яуа ергә.
Күбәләктәй ҡарҙар менән
Уйнайбыҙ бергә-бергә.

йоҡоға талған еремә
аҡ юрған йылы булһын.
көс-хәл йыйғанерҙә тағы
емеш - еләктәр уңһын.

**Йомаҡ ҡойоу** - йәш килен һыуға бара, тәңкәләре ҡойолоп ҡала.(ҡар яуыуы)

**Әңгәмә** - ҡар бөртөктәре ҡайҙа барлыҡҡа килә? Улар нимәгә оҡшаған?

**Тикшереү - тәжрибә эше -**

Ниндәй ҡарҙан әүәләп була? Әүәләп ҡарағыҙ. (бары тик епшек ҡарҙан ғына нимәлер әүәләп була)

**Хеҙмәт** - ҡарҙы тау эшләр өсөн бер ергә өйөү, коллектив менән эшләргә өйрәтеү.

**Хәрәкәтле уйын: "Турғай менән ҡарға"** - тәрбиәсенең командаһын тыңларға, етеҙлекте үҫтереүҙә, тирә - йүндә еңел табышырға булышлыҡ итеү.

**Уйын – күнегеү: тура сәпкә ҡар менән бәреү - күҙкүремен, хәрәкәт әүҙемлеген, етеҙлектә күнектереү.**

## Күҙәтеү № 2

**Ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙы күҙәтеп сағыштырыу.**

**Маҡсат:** ағастар тураһында белемдәрен киңәйтеү, ҡыҙыҡһындырыу

**Эш барышы:**

**Йомаҡтар ҡойоу**-йәйен-ҡышын бер төҫтә.
Үҙгәрмәй ул бөртөк тә.(шыршы)
Ете юлдың сатында
Егәрле еңгәй ултыра.
Муйынсағын таҡҡан .
Ҡыҙыл кершән яҡҡан. (балан)

Ниндәй ағастарҙы беләһегеҙ? (шыршы.ҡайын,имән.пихта)

Ылыҫлы ағастар япраҡлы ағастарҙан нимәһе менән айырылалар?

Ниндәй уртаҡлылыҡтары бар? (олоно, ботаҡтары, тамыры)

Ағастарға үҫер өсөн ниндәй шарттар кәрәк? (йылы, һыу, яҡтылыҡ)

- Ағастар тәбиғәткә ниндәй файҙа килтерәләр?
**Хеҙмәт** - физкультура майҙансығын сүп - сарҙан таҙартыу-күмәк эште татыу эшләргә булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйын: "Парыңды тот"** йүгереп үтеү, ҡаршылыҡтар аша
**Уйын - күнегеү:** урындан алыҫлыҡҡа һикереү.

## Күҙәтеү № 3

**Вертолетты күҙәтеү..**
**Маҡсат** - һауа транспорты тураһында белемдәрен барлау.пилот профессияһына ҡыҙыҡһыныу уятыу. Батырлыҡ тойғоһон уятыу.
**Эш барышы:**
Ҡуңыҙ түгел - гөжләй,
Ҡош түгел – оса (вертолет)
- Вертолет нимә ул? Вертолет сиңерткәгә нимәһе менән оҡшаған? (тышҡы ҡиәфәте)
- Ниндәй вертолеттар була? (йөк, хәрби, санитар - ҡотҡарыусы вертолеттар була)
- Вертолет менән самолет нимә менән айырылалар?
**Хеҙмәт;** майҙансыҡта ҡар көрәү.
**Хәрәкәтле уйын: "Самолеттар**" - һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарыу.
**Хәрәкәтле уйын: “Йәшенмәк"** - бәйле күҙҙәр менән тирә - йүндә һәйбәт хәрәкәтләнергә, ишетергә булышлыҡ итеү.
**Уйын - күнегеү "Күперҙе сыҡ"** - бүрәнәлә ҡырын атлап йөрөү.

## Күҙәтеү № 4

**Елдең көсөн һәм йүнәлешен күҙәтеү.**
**Маҡсат:** Балаларҙы үҙ - аллы елдең көсөн йүнәлешен табырға өйрәтеү, елдең көсө яуым - төшөмгә бәйлелеген төшөндөрөү, флюгер тураһында белешмә биреү, тәбиғәттең һәр күренешенә ыңғай ҡараш тәрбиәләү.
**Эш барышы:**
Көслө ел урам буйҙарын - зырлата ҡалай.
Әйтерһең әсәйҙән ҡасҡан - шаян бер малай.
Быныһын – тегеһен дә - ул тотоп ҡарай.
Йә килеп бер һылыуҙың

Сәстәрен тарай.
Хәлдәре бөттө, арыны,
Йүгерә торғас.
Туҡтаны, ҡояш апай ,
Ҡолағын борғас. (М.Тайсина)

- Балалар, елдең иҫкәнен ҡайҙан белеп була? Ә бына ҡайһы яҡтан иҫкәнен белер өсөн таҫманы, йә яулыҡты ҡолғаға элеп ҡуйырға кәрәк. Ел көньяҡтан да, төньяҡтан да, көнсығыштан, көнбайыштан да иҫергә мөмкин. Уны беҙ тик компас менән генә белә алабыҙ.

**Хәрәкәтле уйын: ”Светофор”** – юл ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү, иғтибарлылыҡты тәрбиәләү, тиҙ реакцияла күнектереү.

**Хәрәкәтле уйын: «Бесәй - сыскан»** - етеҙлектә, сослоҡта күнектереү.

**Уйын-күнегеү** - ҡар туптарын вертикаль сәпкә ташлау, сослоҡта күнектереү.

**Хеҙмәт** - Ҡарҙы юл ситтәренә өйөү.

## Күҙәтеү № 5

**Ҡар яуыуын күҙәтеү.**

**Маҡсат**: ҡар бөтөктәрененең килеп сығышы менән таныштырыу, ҡыҙыҡһындырыу. Логик фекерләү ҡеүәһен, һығымта яһарға

**Эш барышы:**

Иртә менән тәҙрәнән
Тышҡа ҡараһам.
Күрәм - ап - аҡ тирә-яҡ-
Тәүге ҡар яуған.

һәр бөртөк, нурҙар бөркөп,
йылмая төҫлө,
улар бейеп, ҡанат елпеп,
еремә төштө. (С.Әлибаев)

талғын ғына емелдәп ҡар яуа. Ҡар бөртөгөнөң биҙәген күрергә мөмкин, ем - ем итә ер өҫтөнә ята. Ҡар нисек барлыҡҡа килә? Ҡарҙы ашарға яраймы?

**Хәрәкәтле уйын: "Ер, һыу, һауа**" - етеҙлек сосҡорлоҡта күнектереү, йәнле тәбиғәт менән таныштырыуҙы дауам итеү.

**Хәрәкәтле уйын:"Баҫтырыш"** - бөтә  майҙансыҡ буйлап бәрелешмәй йүгерергә күнектереү.

**Спорт уйыны** "**Хоккей**" - уйындың ҡағиҙәләрен үҙләштерергә ярҙам итеү, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫтә тотоу.

## Күҙәтеү № 6

**Бурандарҙы күҙәтеү.**

**Маҡсат:** Бурандарҙың нисек килеп сығыуы; уның зыяны һәм файҙаһы тураһында белемдәр биреү.

**Эш барышы:**

күҙе тондо ҡырҙарҙың, ел бейене, олоно,
Буран, буран ҡоторҙо тәҙрәләргә һуғылып.
Ҡолаҡ ситен, танауҙы өй түбәһен тетрәтеп ,
Семетергә тотондо. ергә төштө йығылып.

Елдең ныҡлап иҫеүе ҡар менән ҡушылыуы буран тип атала буран юлдарҙы һәм бушлыҡтарҙы ҡар менән тултыра, бурандар ҡарҙы шылдырып йөрөтә. Баҫыуҙарҙа ҡар тоҡостар ҡуйһалар, буран йәһәт кенә уны ҡар менән тултырып ҡуя. Баҫыуҙарҙа ҡар күп булһа игендә һәйбәт үҫә.

**Хәрәкәтле уйын:"Энә менән еп"** – сигнал буйынса майҙансыҡта бәрелешмәй генә йүгереүҙә күнектереү, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү

**Хәрәкәтле уйын: "Баҫтырыш"** - бөтә майҙансыҡ буйлап бәрелешмәй йүгерергә күнектереү.

**Спорт уйыны "Хоккей"** - Уйындың төп элементтары нда күнектереү, етеҙлек сослоҡ күҙ күремен үҫтереү, спортсмен булырға теләк тыуҙырыу.

**Хеҙмәт** - Ҡар араһында лабиринт төҙөргә булышлыҡ итеү.

## Күҙәтеү № 7

**Ҡыуаҡтарҙы күҙәтеү**

**Маҡсат:** Ҡыуаҡтар тураһында белемдәрен барлау, айырмалыҡтарын табыу**.** Ағастар менән сағыштырыу, йәнле тәбиғәт менән ҡыҙыҡһындырыу, тәбиғәткә һаҡсыл, хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.

**Эш барышы:**

- Ете юлдың сатында егәрле еңгә ултыра, муйынсаҡ таҡҡан, ҡыҙыл кершән яҡҡан. (балан).
- Эйелә – бөгөлә, аҡ мамығы ҡойола, ҡара күҙе күренә .(муйыл)
- Өйөм артында үҙе, бөҙрә сәсле, күк бүре. (сирен)

Ҡыш булғас
Бар ағас, бар ҡыуаҡ
Яланғас.

- Ҡыуаҡтарҙың япраҡтары ҡайҙа булған? Ҡыш көнө улар өшөмәйҙәр. Ни өсөн? Ҡыуаҡ менән ағас нисек айырыла?

**Хәрәкәтле уйын: "Флагты ҡолатма"** - предметтар араһында йылан кеүек атлап йөрөү, иғтибарҙы үҫтереү.

**Хәрәкәтле уйын: "Беҙ - күңелле шат балалар"** - уйындың ҡағиҙәләрен боҙмай уйнарға, шиғырҙың һүҙҙәрен дөрөҫ һәм аңлайышлы әйтергә өйрәтеү.

**Уйын - күнегеү** - санала бер - беренде шыуҙырыу - бәләкәй тауҙан өйөп төшөргә сананың бауын ҡулда тоторғ, ысҡындырмаҫҡа күнектереү.

**Хеҙмәт**: Ҡарҙы бер урынға өйөргә булышлыҡ итеү.

## Күҙәтеү № 8

**Көрттәрҙең тәрәнлегеп үлсәү.**

**Маҡсат:** Көрт тураһында мәғлүмәт биреү, унын үҙенсәлектәре менән танышыу, үҙ фекерендә әйтергә, һығымталар яһарға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

Аҡ ҡар баҫкан яланды .
Ҡураларҙы, соланды,
Ябалаҡлап ҡар яуа,
Бөгөн буранлы һауа.
Иртә һалҡын яланда
Ҡар бураны һеперә. (Д.Юлтый)

Майҙансыҡта ҡар ҡайҙа күберәк, ҡайҙа үҙерәк? Тәрәнерәк? Ҡайһы тирәһендә һайыраҡ?

**Хәрәкәтле уйын: "Крепость"** - яңы уйындың ҡағиҙәләре менән таныштырыу, балалар һаулығын нығытыу.

**Хәрәкәтле уйын: «Бесәй - сысҡан»** - етеҙлектә, сослоҡта күнектереү.

**Уйын - ярыш "Кем мәргән?"** - Сәпкә ҡар уң һәм һул ҡул менән бәрергә күнектереү, сослоҡ етеҙлек тәрбиәләү.

**Хеҙмәт** - Веранданың иҙәнен ҡарҙан һепереп сығарыу.

## Күҙәтеү № 9

**Ҡар яуыуын күҙәтеү.**

**Маҡсат** - Ҡар бөртөктәренең төҙөлөшөн тикшереп ҡарау, нисек ергә осоп төшкәнен ҡарау, яңы һүҙҙәр менән таныштырыу.

**Эш барышы:**

Ҡар бөртөктәре ҡойола.
Күктән берәмләп .
Көмөш балаҫ ерҙе йәмләй
Ята йемелдәп. (М.Ғәйфуллина)

- Ҡар бөртөктәрен лупа аша ҡарау. Улар һәр саҡ 6 нурлы булалар, төҙөлөштәре төрлө була.

**Хәрәкәтле уйын: "Ҡышҡы күбәләктәр"** - сослоҡта, етеҙлектә күнектереү, бөжәк атамаларын иҫтә ҡалдырыу.

**Хәрәкәтле уйын: "Ҡарсыға менән себештәр"** – сигнал буйынса майҙансыҡта бәрелешмәй генә йүгереүҙә күнектереү, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Хеҙмәт** - майҙансыҡта ҡарҙы көрәү, ҡар ҡоролмалары яһау өсөн ҡарҙы бер урынға өйөү.

**Күҙәтеү № 10**

**Машиналарҙы күҙәтеү.**
**Маҡсат -** Урамда үткән машиналарҙы күҙәтеү - уларҙың кешегә файҙаһы, зыяны тураһында фекер йөрөтөү.
**Эш барышы -**
На тиһәң - атламай,
Тр – р тиһәң -туҡтамай.
Бесән һалһаң ашамай,
Ҡысҡыра-ҡысҡыра саба,
Йүгереүҙән бушамай.(машина)
- Һеҙ ниндәй машиналарҙы беләһегеҙ? Йәгеҙ әле йөк, еңел, хәрби, махсус машиналарҙы атап китегеҙ. Машиналар ни өсөн кәрәк? Дидактик уйын "Нимә яҡшы, нимә насар?" - логик фекерләүҙә, һығымталар яһарға өйрәтеүҙә күнектереү.
**Хәрәкәтле уйын: "Крепость"** - яңы уйындың ҡағиҙәләре менән таныштырыу, балалар һаулығын нығытыу**.**
**Хәрәкәтле уйын: «Светофор" –** юл ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү, иғтибарлылыҡты тәрбиәләү, тиҙ реакцияла күнектереү.
**Уйын - ярыш "Кем етеҙ?"** - веранда эсендә ярыш машиналарының күргәҙмәһен ойоштороу, сослоҡ етеҙлек тәрбиәләү**.**
**Хеҙмәт** - лабиринт юлдары төҙөү**.**

**11-се картотека.**
**Эттәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат**: Балаларҙың эттәр тураһында белемдәрен барлау, уларға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен белергә, уларға ҡарата хәстәрлек тойғоһо тәрбиәләү.
**Эш барышы -**
Йомаҡ ҡойоу, кешенең дуҫы, йорттоң һаҡсыһы (эт).
Бәләкәс кенә Аҡтырнаҡ
Өргән була ер тырнап.
- Һеҙ һаумы? Мин һау - һау, - ти,-
Һалдат кеүек уяу, -ти.
Ялбыр ҡойроҡло Полкан
Ҡапҡа төбөнә ятҡан -
Өрмәй ҙә, һикермәй ҙә,
Яттарҙы индермәй ҙә.
Хужалары дуҫтарға

Итле ҙур һөйәк һалған.
Аҡтырнаҡ менән Полкан
Кимерә ике яҡтан. (И.Илембәтова)
Бәйһеҙ эт йөрөтөргә яраймы, юҡмы.бының өсөн ниндәй яҙа ҡаралған, эттәр һөжүм итһә, нимә эшләп була? Өйҙәге үҙ этегеҙ менән генә дуҫ булырға тырышығыҙ.
**Хәрәкәтле уйын: “Флагты ҡолатма”** - Предметтар араһында йылан кеүек атлап йөрөү, иғтибарҙы үҫтереү.
**Хәрәкәтле уйын: “Пограничник эт”** - уйындың ҡағиҙәләрен боҙмай уйнарға шиғырҙың һүҙҙәрен дөрөҫ һәм аңлайышлы әйтергә өйрәтеү.
**Уйын – күнегеү -** санала бер - беренде шыуҙырыу - бәләкәй тауҙан өйөп төшөргә сананың бауын ҡулда тоторға ысҡындырмаҫҡа күнектереү.

## Күҙәтеү № 12

**Юлдарҙы күҙәтеү;**
**Маҡсат -** юлдарҙың әһәмиәтлеген, аңлатыу, юлдар таҙа булһын өсөн нимә эшләргә кәрәклеген күҙ уңында тотоу, юл төҙөүселәр хеҙмәтенә хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү.
Эш барышы;
- Юлдар ни өсөн кәрәк? Юлдар булмаһа беҙ нисек йәшәр инек? Кемдәр юл төҙөй? Ниндәй юлдарҙы беләһегеҙ? Юлһыҙ беҙ нисек йәшәр инек?
**Хеҙмәт** - майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу.
**Уйын - күнегеү** - Саңғыла йөрөргә булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйындар:** балаларҙың үҙ теләктәре буйынса уйындар, уларҙы.

## Күҙәтеү № 13

**Бурандан һуңғы тәбиғәт күренешен күҙәтеү.**
**Маҡсат:** Бурандың һөҙөмтәһен күрергә, һығымталар яһарға булышлыҡ итеү. Тәбиғәттең һәр күренешенә ыңғай ҡараш тәрбиәләү.
**Эш барышы:**
Аҙашыр тип буранда,
Сығармайҙар урамға
Өйҙә буран,аҡ буран,
Әһә - һә мин ҡоторам.
Өйҙә буран тиҙ тымды
Әсәй тотто ҡулымды
Сыҡ, - тине, - бар урамға

Туңып ин ҡар - буранда.
Көрттәрҙең бейеклегенә һәм күплегенә иғтибар итеү, бурандың сығыуына нимә сәбәпсе була - фекерҙәргә иғтибар итеү.
**Хәрәкәтле уйындар: ”Йәшенмәк”** - ҡағиҙәләрҙе тулыһынса үтәү, һанашмаҡ ятлау, уйын менән ҡыҙыҡһындырыу.
**Хәрәкәтле уйындар: “Буш урын”** - уйынға саналарҙы ла ҡулланыу, етеҙлек сослоҡта күнектереү.
**Уйын – күнегеү** - ҡаршылыҡтар аша атлап йөрөү.
**Хеҙмәт** - майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу, бер урынға ҡар өйөмдәренөйөү.

## Күҙәтеү № 14

**Ҡышлаусы коштарҙы күҙәтеү.**
**Маҡсат** - ҡоштар тураһында белемдәрен барлау, ҡышлаусы ҡоштарҙың аҙыҡ табыу ысулдарын аңлатыу, тере организмды йәнһеҙ тәбиғәттән айырырға  булышлыҡ итеү.
**Эш барышы;**
Йомаҡ ҡойоу -
Аяғы аҡтай, ҡойроғо ҡоромдай, мороно боҙҙай, күҙе тоҙҙай, йөрөй елдәй. (һайыҫҡан).
Ағас башы туҡылдаҡ, туҡый - туҡый туҡ булдыҡ. (тумыртҡа)
- Яҙын уйнай, йүгерә, голдор ҙа голдор килә, ҡышын да ул беҙҙә ҡала, ҡар аҫтына ла инә.(ҡор)
Баҡсалағы ағастарға
Теҙелгән ҡыҙылтүштәр.
Муйындағы мәрйендәре,
Ғүйә ҡыҙыл тәлгәштәр.
**Хәрәкәтле уйындар: “Себештәр һәм карауылсы“** балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү, етеҙлектә, иғтибарлылыҡта күнектереү.
**Хәрәкәтле уйындар:** үҙ теләктәре буйынса - лидерлыҡ сифаттарын тәрбиәләү.
**Спорт уйыны “Хоккей - сәкән”** - сәкән таяҡтары менән хәүефһеҙ ҡулланырға өйрәтеү.

## Күҙәтеү № 15

**Миләш ҡыуағын күҙәтеү.**
**Маҡсат:** Көҙ, ҡыш башында был ҡыуаҡтың үҙгәрештәре тураһында һөйләргә өйрәтеү, фантазия - хикәйә төҙөргә булышлыҡ итеү.
**Эш барышы:**
Миләш бирә ҡыҙыл емеш.

Тәлгәшәүе арыу икән,
Әсе булһала ашайбыҙ,
Сөнки ул дарыу икән. (Г.Юнысова)
Зәңгәртауҙа аҡ миләш,
Аҡ миләш, көҙгө миләш,
Һалҡынға бирешмәҫме .
Үҙе кескәй, үҙе йәш.
Йүгереп барҙым янына
Һаҡлан - тинем - ҡар ҡыҙы,
Бирешмәҫ - тине ҡояш,-
Ул бит тыуған яҡ ҡыҙы.
Миләш - ағасмы, ҡыуаҡмы? Миләште ни өсөн бик һанлайҙар? Уның емештәре витаминдарға бик бай, емештәре йөрәк ауырыуҙарын дауалай.
**Хәрәкәтле уйындар: “Хәйләкәр төлкө“** балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү, етеҙлектә, иғтибарлылыҡта күнектереү,
**Хәрәкәтле уйын: "Ҡышҡы күбәләктәр” -** сослоҡта, етеҙлектә күнектереү, бөжәк атамаларын иҫтә ҡалдырыу.
**Спорт уйыны “Хоккей” -** сәкән таяҡтары менән хәүефһеҙ уйнарға күнектереү.